**Раббым рәхмәт һиңә!**

Раббым биргәнеңә шөкөр итәм,
Ҡабул итеп алам бар һүҙеңде.
Булған тормошом менән ҡәнәғәтмен,
Һиңә рәхмәтлемен, асҡан өсөн күҙемде.

Һин булғанда, минең янда Раббым,
Ҡайғыһы ла,шатлығы ла бер тигеҙ.
Бәхетте лә, мул бирәһең һин бәндәңә.
Тормош  юлы булһын өсөн тип тигеҙ.

Эй, Раббым, бары һинең менән,
Матур үтһен ине минең көндәрем.
Мин ризамын, барыһы менән,
Һиңә фиҙа ҡыла минең ғәзиз йәнем.

Был донъя гүзәл бер мәл генә,
Дуҫ ҡәҙерҙәрен белеп йәшәйек.
Йылдар бик тиҙ уҙа, аҡҡан һыу кеүек,
Берҙә үкенмәйсә мәңгелеккә китәйек.

Эй, Раббым, фатихаңа күмелеп,
Доға ҡылам һиңә һәр көн таң атҡас.
Үкенмәҫлек булһын ине үткән көнөм,
Кистәрен, шөкөр итеп, йоҡларға ятҡас.

Үткән ғүмер тарих булып тороп ҡала,
Зарланмайым мин артта ҡалған бар-юҡҡа.
Тәрән һаҙлыҡтан мине тартып алдың.
Аҙаҡы көнөмә тиклем Раббым, мине ярлыҡа.